Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теле буйынса Аҡмулла олимпиадаһының был турында текст буйынса эш тәҡдим ителә. Бирелгән тексты иғтибар менән уҡып сыҡҡандан һуң 20 һорауға яуап бирергә кәрәк буласаҡ, улар өс өлөшкә бүленә. 1-се (А) өлөшөндә һайланма яуаптар менән тест тәҡдим ителә. Был теста 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан 1 дөрөҫ вариантты һайлап, һеҙ яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа тамға ҡуйырға тейеш булаһығыҙ.

2-се (В) өлөшөндә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк була.

3-сө (С) өлөшөндә һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар бирергә кәрәк буласаҡ, был яуаптар һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын.

4-се өлөштә текст буйынса инша яҙырға кәрәк булыр, уны 2-се һанлы яуаптар бланкыһында башҡарығыҙ.

Принтерҙан сығарып алған яуаптар бланкыларында үҙегеҙ тураһында мәғлүмәтте, һорауҙарға яуаптарҙы тултырып, иншаны яҙғандан һуң, был бланкыларҙы сканер аша үткәрегеҙ (бик булмағанда фотоға төшөрөгөҙ, йә компьютерығыҙҙа булған Paint программаһында эшләгеҙ, былай тағы ла уңайлыраҡ) һәм электрон вариантын сайтҡа элегеҙ. Сканкопияғыҙ (фотокопияғыҙ) бик асыҡ, таҙа һәм уҡымлы булһын. Уңыштар һеҙгә!

**Текст**

(1)Ауылыбыҙҙың осонда түңәрәк кенә бер аҡлан бар. (2)Яҙ етеү менән, аҡлан өҫтөн хәтфәләй йәшел үлән ҡаплай, тәүге сәскәләр күҙҙәрен аса.

(3)Элегерәк уртала аҡ ҡайын үҫә ине. (4)Ер йәшәргәс, ул аҡланды йәмләп, нәфис япраҡтарын ярып, селтәр шәлен иңенә һалып, тағы ла матурыраҡ булып, ғорурланып ултыра торғайны, ләкин быйыл яҙын аҡ ҡайын өндәшмәй генә, моңһоуланып тора бирҙе, сөнки уҙған йәйҙә тыйнаҡһыҙ малайҙар уның ботаҡтарын һындырҙылар, бысаҡ менән уңалмаҫ йәрәхәттәр яһап, тәмле һыуын ағыҙып эстеләр. (5)Ул ғына етмәгән, шашҡан малайҙар ҡайынға ут төртөп киткәндәр...

(6)Ерҙә тағы яҙ шаулай. (7)Елбер-елбер килеп, аллы-гөллө матур күбәләктәр оса, турғайҙар яңы тыуған көнгә ҡыуанышып матур йырҙарын һуҙа. (8)Тик ҡайын ғына һаман терелмәй. (9)Тирә-яғындағы көйгән үләндәр ҙә баш ҡалҡыта алманы. (10)Үҙен маҡтап йырлаған ҡоштар ҙа, күләгәһендә ял итергә яратҡан кешеләр ҙә ҡабаттан күренмәне. (11)Аҡ ҡайын бер меҫкен хәлендә тороп ҡалды. (12)Эй, аҡ ҡайын! (13)Яҙын иртәләрҙә һаман да үҙеңдең йәшел, гүзәл сағыңдың кире ҡайтырына ышанаһың, өмөтләнәһең.

(14)Тәбиғәттең бер генә биҙәге юғалһа ла, донъябыҙҙың бер мөйөшө кителгән һымаҡ тойола. (15)Эй,[1] кешеләр,[2] һаҡлайыҡсы тыуған еребеҙҙе,[3] тәбиғәтебеҙҙе,[4] илатмайыҡ аҡ ҡайынды! (16)Улар беҙҙән мәрхәмәтле ярҙам көтә.

(“Аманат” журналы)

# 1-се өлөш

Был өлөштә 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан бер генә дөрөҫ вариантты һайлағыҙ

**А1 1-се һөйләмдә хәбәр ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән:**

1. Ҡылым
2. Исем
3. Атама һөйләм
4. Модаль һүҙ

**A2** **1-се һөйләмдәге *ауылыбыҙҙың* һүҙе ҡайһы юлда ялғауҙарға дөрөҫ бүленгән:**

1. *Ауыл-ы-быҙ-ҙы-ң*
2. *Ауыл-ы-быҙ-ҙың*
3. *Ауыл-ыбыҙ-ҙың*
4. *Ауыл-ыбыҙ-ҙы-ң*

**A3** **2-се һөйләмдә ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланылған**

1. Сағыштырыу, метонимия
2. Метонимия, йәнләндереү
3. Метонимия, метафора
4. Сағыштырыу, йәнләндереү

**A4** **4-се һөйләм нисә ябай һөйләмдән тора?**

1. 2 ябай һөйләм
2. 3 ябай һөйләм
3. 4 ябай һөйләм
4. 5 ябай һөйләм

**A5** **13-сө һөйләмдә исемләшкән сифат ҡылымды табып, ялғауҙарын билдәләгеҙ**

1. Йүнәлеш, килеш ялғауҙары
2. Заман, эйәлек заты, килеш ялғауҙары
3. Заман, йүнәлеш, килеш ялғауҙары
4. Йүнәлеш, эйәлек заты, килеш ялғауҙары

**A6** **3-сө һөйләмдә хәбәр ниндәй заманда тора?**

1. Билдәле үткән заман
2. Билдәһеҙ үткән заман
3. Хәҙерге заман
4. Тамамланмаған үткән заман

**A7** **12-се һөйләмдә ымлыҡ ниндәй мәғәнә белдерә?**

1. Өндәшеү
2. Саҡырыу
3. Һоҡланыу
4. Ҡыҙғаныу

**A8** **15-се һөйләмдә ымлыҡ ниндәй мәғәнә белдерә?**

1. Өндәшеү
2. Үкенеү
3. Һоҡланыу
4. Ҡыҙғаныу

**A9** **13-сө һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ**

1. Эйәртеүле ҡушма һөйләм
2. Ябай билдәле эйәле һөйләм
3. Ябай билдәһеҙ эйәле һөйләм
4. Ябай эйәһеҙ һөйләм

**A10** **2-се һөйләмдә эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ**

1. Сәбәп эйәрсән һөйләм
2. Шарт эйәрсән һөйләм
3. Ваҡыт эйәрсән һөйләм
4. Теҙмә ҡушма һөйләм

# 2-се өлөш

Был өлөштә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирегеҙ

**B1** **14-се, 15-се һөйләмдәрҙә ҡылымдар ниндәй һөйкәлештә тора?**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | юғалһа | А | Хәбәр һөйкәлеше |
| 2 | тойола | Б | Бойороҡ һөйкәлеше |
| 3 | һаҡлайыҡсы | В | Шарт һөйкәлеше |
| 4 | илатмайыҡ | Г | Теләк һөйкәлеше |

**B2** **4-се һөйләмгә ярашлы һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | быйыл | А | өндәшмәй генә |
| 2 | яҙын | Б | тора birҙе |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 3 | аҡ ҡайын | В | моңһоуланып |
| 4 | өндәшмәй генә | Г | аҡ ҡайын |

**В3 4-се һөйләмдә бирелгән ярҙамсы һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | ла | А | теркәүес |
| 2 | тағы | Б | бәйләүес |
| 3 | генә | В | киҫәксә |
| 4 | менән | Г | ярҙамсы һүҙ түгел |

**В4 4-се һөйләмдә бирелгән теркәүестәрҙең төрҙәрен билдәләгеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | ла | А | теркәүес түгел |
| 2 | ләкин | Б | сәбәп теркәүесе |
| 3 | сөнки | В | ҡаршы ҡуйыу теркәүесе |
| 4 | менән | Г | йыйыу теркәүесе |

**В5 15-се һөйләмдә өтөрҙәрҙең ҡуйылышын аңлатығыҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | [1] | А | Өндәш һүҙ өтөр менән айырыла |
| 2 | [2] | Б | Ымлыҡтар өтөр менән айырыла |
| 3 | [3] | В | Тиң киҫәктәр өтөр менән айырыла |
| 4 | [4] | Г | Ябай һөйләмдәр өтөр менән айырыла |

**В6 Текста ҡулланылған сифаттарҙы синоним төрҙәре менән тап килтерегеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | нәфис | А | миһырбанлы, шәфҡәтле |
| 2 | тыйнаҡһыҙ | Б | бахыр, ҡыҙғаныс |
| 3 | меҫкен | В | матур, сибәр |
| 4 | мәрхәмәтле | Г | тәрбиәһеҙ, тотанаҡһыҙ |

# 3-сө өлөш

Һорауҙарҙы уҡығыҙ һәм яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа өлгөгә ярашлы яуаптарын яҙығыҙ. Яуаптарығыҙ һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын

**С1** Текста ниндәй проблема күтәрелә?
**С2** Текста малайҙарҙың ниндәй сифаттары тасуирлана?
**С3** *Донъяның бер мөйөшө кителгән (14-се һөйләм)* фразеологик берәмеге ниндәй мәғәнә белдерә*?*
**С4** *Елбер-елбер* (7-се һөйләм) ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

# 4-се өлөш

Алда бирелгән текст буйынса инша яҙығыҙ. Автор тарафынан күтәрелгән проблемаларға, автор ҡарашына аңлатма бирегеҙ (текстан күпләп цитата ҡулланмағыҙ). Уның ҡарашы менән килешеүегеҙ-килешмәүегеҙҙе яҙығыҙ. Ни өсөн? Үҙ яуабығыҙҙы тормоштан йә китаптан уҡып алған миҫалдар менән дәлилләгеҙ.

Инша күләме 150 һүҙҙән дә аҙ булмаһын.

Уҡылған тексҡа нигеҙләнмәйенсә яҙылған эш баһаланмай.

Әгәр инша тәҡдим ителгән текстың йөкмәткеһен генә һөйләп биреүгә ҡоролһа йә текст аңлатма бирелмәй генә күсереп яҙылһа, ундай эш нуль балл менән баһалана.

Иншаны бөхтә башҡарығыҙ, уны таҙа, аңлайышлы почерк менән яҙығыҙ.